Ғилем һәм ғәмәл

# ДОҒА ҠЫЛЫУ ТӘРТИБЕ



## Ҡөрьән ашы мәжлесендә Ҡөрьән уҡығандан һуң бағышлау:

Аллааһүммәр-зүкнәә ғишән биләә бәләәин диинән билә һәүәә ин үә ғәмәлән биләә рийәә ин үә ғәфүән биләә ғәҙәәбин үә мәғфиратән биләә ғитәәбин үә джәннәтән биләә хисәәбин үә руйәтән биләә хиджәәб. Аллаһүммә түб ғәләйнәә ҡабләл-мәүти үәрхәмнәә ғиндәл-мәүти үә ләә түғәҙҙибнәә бәғдәл-мәүти үә һәүүин ғәләйнәә сәкәраатәл-мәүти бирахмәтикә йәә әрхәмәр-раахимиин.

Мәғәнәһе: Эй, Аллаһым! Беҙҙе бәләһеҙ тормош менән, һауаланыуһыҙ дин менән, рияһыҙ изге ғәмәл менән, ғазапһыҙ ғәфү итеү менән, шелтәһеҙ ярлыҡау менән, хисап биреүһеҙ йәннәт менән бүләклә!

Эй, Аллаһым! Беҙҙән тәүбәбеҙҙе вафатыбыҙ ваҡытында мәрхәмәтле бул һәм беҙҙе вафатыбыҙҙан һуң ғазаплама, үлем иҫереклегебеҙҙе еңеләйт! Һинең мәрхәмәтең менән генә һәр нәмә булалыр!

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Эй, Раббым! Ошо уҡылған Кәләм шәрифтән хасил булған әжер һәм сауаптарҙы уҡыуҙа булған хата һәм кәмселектәрен үҙендең киң рәхмәтең менән ғәфү итеп, үҙең дөрөҫләп ҡабул итһәң ине, үҙеңдең ризалығың өсөн бағышланым.

Ике йыһанға рәхмәт өсөн ебәрелгән дусың-хәбибең Мөхәммәд Мостафа саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләмдең рух шәрифтәренә бағышланым. Уның әһел-әүләдтәренең рух шәриф-тәренә бағышланым. Атабыҙ Әҙәм ғәләйһис-сәләм һәм әсәбеҙ Һауа радыяллаһү ғәнһә рух шәрифтәренә бағышланым.

Атабыҙ Әҙәм ғәләйһис-сәләм менән пәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм араһында килеп киткән бар пәйғәмбәрҙәрҙең ғәбидтәрҙең, заһидтарҙың, тәбиғи-тәбиғиндәрҙең әүлиә һәм әнбиәләрҙең, бөтөн хәлифәләр-ҙең, сәхәбәләрҙең, остаздарыбыҙҙың, мөьмин-мөьминәләр-ҙең, мөслим-мөслимәләрҙең, нәҫелдәре өҙөлөп доғаға мохтаж булған әрүәхтәрҙең, кендек әбейҙәребеҙҙең, сөннәт бабайҙарыбыҙҙың, өҫтәребеҙҙә хаҡтары булған, "доға ҡылышайыҡ" тип һүҙ ҡуйышҡан әруахтарҙың рух шәрифтәренә, ахирәттә иман өсөн, ҡәберҙә юлдаш өсөн мәхшәр көнөндә өҫтөнә күләгә булыр өсөн, мизанда (үлсәүҙә) изге ғәмәлдәрен ауыр ҡылыу өсөн, сират күперенән үткәндә етәксе булыу өсөн, ожмахта Аллаһ Тәғәләнең дидарын күреү өсөн бағышланым.

Һанап бағышланым: Ошо йорт хужаларынан доға өмөт иткән бар өләсәй-олатайҙарыбыҙҙың ата-әсәләребеҙҙең, хәләл ефеттәренең, ҡәйнә-ҡәйнештәребеҙҙең, доға өмөт иткән ир һәм ҡыҙ туғандарыбыҙҙың сабый саҡта вафат булған, бәлиғ булғас вафат булған ир һәм ҡыҙ балаларҙың, ошо йорттан доға өмөт иткән бар әрүәхтәрҙең рух шәрифтәренә бағышланым, рухтарын шат ҡылып, ҡәбер ғазаптарын күтәрһәң ине, ҡәберҙәрен нурлы ҡыл, бәндәселек менән хаталанып ҡылған гонаһтарын ярлыҡа, ошо йорттоң хужаларынан риза булып ҡал.

Эй, Раббым! Был йортҡа хәйерле бәрәкәт бир, әжәлдәренә сабырлыҡ, ауырыуҙарына шифа, бәхетһеҙҙәренә бәхет, тәүфиҡһыҙҙарына тәүфиҡ бир. Өйләнгән балаларының икеһе араһында мөхәббәт биреп, тигеҙлек, һаулыҡ, сәләмәтлек, татыулыҡ менән, ололарҙы хөрмәтләп, кеселәргә шәфҡәт итеп йәшәргә насип ит, уларҙы тура юлға, ислам юлына йүнәлт.

Үҙеңдең ҡушҡандарыңды үтәп, тыйғандарыңдан тыйылып, тапҡан малдарын изге эштәргә тота торған хәйерле ғүмер бир. Уларҙан тыуған балалар ҙа шәфҡәтле булып, Ҡөрьән юлы менән йәшәй торған балалар булып үҫһәләр ине.

Яңғыҙ булған балаларына хәләл һөт имгән кеше насип ит. Толдарға толлоҡ әжере бир, мохтаждарға мохтажлыҡ әжере бир. Ауырыуҙарға Үҙ шифаңды, ололарыбыҙға хәйерле ҡартлыҡ, балаларыбыҙға тәүфиҡ-истиҡамәт, халҡыбыҙға һиҙәйәт, түрәләребеҙгә миһырбан, байҙарыбыҙға йомартлыҡтарынды насип ит.

Ошо мәжлескә алыҫ һәм яҡындарҙан килеп, Үҙеңдең ризалығыңа өмөт итеп доғаға ҡул күтәреп ултырған мөьмин һәм мөьминәләрҙең доға өмөт иткән бөтөн әрүәхтәрҙең:олатайөләсәйҙәренең, ата-әсәләренең, ҡәйнә-ҡәйнештәренең, хәләл ефеттәренең, ир һәм ҡыҙ туғандарының, вафат булған ир һәм ҡыҙ балаларының, өҫтәренә хаҡтары булған, "доға ҡылышайыҡ", - тип һүҙ ҡуйышҡан бөтөн әрүәхтәрҙең рухтарын шат ҡылып, ҡәбер ғазаптарын күтәр, ҡәберҙәрен нурлы ҡыл, гонаһтарын ғәфү ҡыл. Ошо уҡылған Кәләм шәриф хаҡы хөрмәтенә ошо йорт хужаларын хәйерле, изге теләктәренә ирештерһәң ине һәм бөтәбеҙҙең дә хәйерле, изге теләктәребеҙгә ирештереп, төрлө бәлә-ҡазаларҙан һаҡлаһаң ине.

Донъялыҡта бәлә-ҡазаларҙан, ахирәттә ут ғазабынан һаҡлап, йәннәттәреңә инеүҙе насип итһәң ине. Был сәғәттә беҙҙе бында йыйған дин ҡәрҙәштәребеҙгә һәм беҙҙең барсабыҙға Аллаһ Тәғәлә хозурына барған көндә мәхшәрҙә лә үҙеңдең хәбибең Мөхәммәд Мостафа салләллаһү ғәләйһи үә сәлләмдең шәфәғәтен насип ит. Әмин.

Раббәнәә әәтинәә фиддүнйәә хәсәнәтәү үә фил-әәхирати хәсәнәтәү үә ҡинәә ғәҙәәбән-нәәр" булған. Мәғәнәһе:

"Эй, Раббым! Донъялыҡта беҙгә изгелек эшләй торған хәйерле ғүмер бир. Ошо изгелебеҙ бәрәкәтендә ахирәттә йәннәтеңде насип ит, ут ғазабындан һаҡлаһаң ине". Әмин.

### Сәфәргә (юлға) сыҡҡанда

Сәфәргә сығыр алдынан ултырып, "әғүҙү-бисмилләһ" - те әйтеп, "Аятүл-Күрси" - не, сәфәр доғаһын уҡып, теләк теләргә кәрәк:

Эй, Раббым! Мине үҙеңә генә сәждә ҡылыусыларҙан итеп, үҙеңдән башҡаға мохтаж итмәйенсә, был сәфәремде уңышлы ҡылһаң ине.

Эй, Раббым! Был сәфәремә мин Һиңә ышанып, үҙемде һиңә тапшырып сығам. Һин миңә үҙеңдең рәхмәтеңде һал, Хызыр ғәләйһис-сәләмде юлдаш ҡыл.

Эй, Раббым! Мине үҙеңдең рәхмәтеңдән, пәйғәмбәребеҙҙең шәфәғәтенән, Хызыр ғәләйһис-сәләмдең һаҡлауынан, Жәбраил ғәләйһис-сәләмдең ҡанаты аҫтынан сығарма.

Һинең ҡушҡандарыңды үтәп, тыйғандарыңдан тыйылып, ошо сәфәремдән юлдарым, эштәрем уң булып, иҫән-һау әйләнеп өйөмә, илемә ҡайтырға насип әйләһәң ине. Үҙеңдән башҡаға мине мохтаж ҡылмаһаң ине. Әмин.

### Хәйерле ғилем теләп доға ҡылыу

Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим.

Эй, Раббым! Тәьмин ит беҙҙе файҙалы ғилем менән, дөрөҫ итеп ятлау менән, үткер фәһем (аңлау) менән, күп нәмәне эсенә ала торған зиһен менән, Үҙең беҙҙән риза булырлыҡ итеп, дауам иттереүсе итеп һәм тәүфиҡ, бәхет, сәләмәтлек бир беҙгә ғилем өҫтәр өсөн.

Ғилем алыуым менән тышым (ҡиәфәтем) һәм эсем нурланһа ине. Наҙанлығым кәмеп, үҙем белә алғанды ислам ҡәрҙәштәремә өйрәтһәм ине. Рәсүлүллаһ салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең мөбәрәк юлына һәм шәриғәтенә хеҙмәт итһәм ине.

Аллаһ Тәғәлә биргән аҡыл һәм сәләмәтлек ниғмәттәренә ғилемем сәбәпле шөкөр итә белһәм ине.

Аллаһ Тәғәлә риза булырҙай иғтиҡад һәм ғәмәлдәр менән донъянан үтеп, Рәсүл әкрам салләллаһу ғәләйһи үә сәлләмдең шәфәғәтенә лайыҡ булһам ине.

Эй, Раббым! Барыбыҙға хәйерле ғилем, шул, ғилемде өйрәтеүсе уҡытыусыларыбыҙға, шул ғилемде өйрәнеүҙә камил аҡыл, зирәк фекер, хәйерле ғүмер насип итһәң ине.

Эй, Раббым! Беҙгә ғилем байлығы бирһәң ине.

Беҙҙе йомшаҡлыҡ менән зиннәтләһәң ине.

Тәҡүәлек менән хөрмәтләһәң ине.

Сәләмәтлек менән биҙәкләһәң ине.

Ғилемдән дә файҙалыраҡ хазина юҡ! Әмин. Доғаларыбыҙҙы ҡабул ҡыл.

### *"Әмин" һүҙенең хасияты*

Рәсүлүллаһ ғәләйһис-сәләм әйткән: "Әмин" тигән һүҙҙең өҫтөнлөктәрен белделәр, шул сәбәптән беҙҙең "Әмин" тигәнебеҙ - ҡабул ит эй, Раббым, беҙҙең доғаларыбыҙҙы", - тигән мәғәнәһендәлер. Шуға күрә мулла доға ҡылғанда әмин тип ултырыу кәрәк.

"Әмин" тигән һүҙҙә күп файҙа һәм доғаларҙың ҡабуллығына сәбәп булған нәмәләр барҙыр, шул сәбәптән һәр кемгә "Әлхәм" ("Фәтихә" сүрәһе) уҡып тамам иткәс, йәғни үәләддааааллиин тип әйткәс, һәр ваҡытта "Әәмиин" тимәк тейешле булыр. Башҡа мәҙхәбтәрҙә намаҙҙа ҡысҡырып әйтелһә лә, хәнәфи мәҙхәбендә был һүҙ эстән әйтелә.

Рәсүлебеҙ ғәләйһис-сәләм әйткән: "Бер кешенең "Әмин" тимәге фәрештәләрҙең "Әмин" тип әйткән ваҡытына тура килһә, ул кешенең бар гонаһтары ярлыҡаныр", - тигән.

### *Саҙаҡа*

Саҙаҡа биреүҙә ун төрлө изгелек барҙыр. Бишеһе донъяла, бишеһе ахирәттә булыр.

Донъяла булған бише:

*беренсеһе: саҙаҡа малды пак(таҙа) итер;*

*икенсеһе: кешене гонаһтан пак итер;*

*өсөнсөһө: саҙаҡа бәләләрҙе һәм ауырыуҙарҙы ҡыуыр;*

*дүртенсе: саҙаҡа биреү менән бер мосолмандың күңелен шатландырһа, ғәмәлдәренең артығыраҡы булыр. Был саҙаҡа мосолмандарҙың күңеленә шатлыҡ һалалыр;*

*бишенсеһе: саҙаҡа бирелгән мал бәрәкәтле булыр, саҙаҡа биргән кешенең ризығы киң булыр.*

Ахирәттә булған бише:

*беренсеһе: саҙаҡа ҡиәмәт көнөндә тамуҡ утына күләгә булыр, саҙаҡа биргән кеше ҡиәмәт эҫелеген күрмәҫ;*

*икенсеһе: саҙаҡа биргән кешенең ҡиәмәттә хисабы еңел булыр;*

*өсөнсөһө: саҙаҡа биргән кешенең изгелеге яуызлыҡҡа ҡарағанда мизанда ауыр килер;*

*дүртенсе: саҙаҡа биргән кеше ғазаптан ҡотолор;*

*бишенсе: саҙаҡа биргән кешенең ожмахта дәрәжәһе артыҡ булыр.*

Был саҙаҡа хәйер-доға мосолман кешегә һәр ваҡыт ҡылыу тейешле. Был саҙаҡа биреүҙә, хәйер-доға алыуҙа Аллаһ Тәғәләнең ризалығы булыр, шайтанға ҡаршылыҡ ҡылыу булыр.

Хәбәрҙә киләләр: "Бер кеше саҙаҡа бирергә теләһә, 70 шайтанға кәртә булыр".

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әйтте: "Саҙаҡа биреү ғазаптан имен ҡылыр, мосолмандар ҡиәмәт көнөндә саҙаҡалары менән күләгәләнерҙәр". Пәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм үҙенең ҡатыны Ғәйшәгә әйткән: "Эй, Ғәйшә! Үҙеңде Аллаһтан һатып ал, йәғни уның ғазабынан ҡотҡар, ярты хөрмә емеше менән генә булһа ла саҙаҡа биреү менән. Был саҙаҡа менән мал кәмемәҫ", - тине.

Ғәли радыяллаһү ғәнһү әйткән: "Һәр ҡасан саҙаҡа үҙ эйәһенең ҡулынан сыҡһа, биш төрлө һөйләр:

*әүәле әйтер: "Мин һинең ҡулыңда ваҡытта кескенә инем, инде оло иттең";*

*икенсе: "Мин һинең ҡулыңда әҙ инем, мине саҙаҡа итеп биреү менән күп иттең".*

*өсөнсө: "Мин һинең ҡулыңда дошман инем, инде мне үҙеңә дуҫ иттең";*

*дүртенсе: "Мин һинең ҡулыңда фани инем, йәғни юҡ булырға яҡын инем, инде мине ҡиәмәт көнөнә тиклем ҡалдырҙың, минең сәбәпле ҡиәмәт көнөндә тамуҡ ғазабынан ҡотолоп, ожмахлы булырһың";*

*бишенсе: "Быға ҡәҙәр һин мине һаҡлай инең, инде мин һине бәлә-ҡазаларҙан һаҡлармын", - тигән.*

Хәбәрҙә киләләр: бер тапҡыр саҙаҡа биреү менән 70 бәлә ишеге ябылыр. Әгәр бер кеше кис һәм көндөҙ саҙаҡа бирһә, ул кешене Аллаһ Тәғәлә һаҡлар: йылан сағып үлеүҙән, кинәт үлеүҙән һәм башҡа хәтәр үлемдәрҙән имен булыр.

Әбү Сәғид Хәнифә рәхмәтуллаһи ғәләйһи әйткән: "Бер кеше саҙаҡаһы менән бәрәкәт табайым һәм саҙаҡа менән ҡиәмәт көнөндә ғазаптан имен булайым тип әйтһә, ул кешегә ун төрлө эш кәрәк булыр:

*әүәле шул - саҙаҡа биргән кешегә әйтмәһен: "Мин быға саҙаҡа бирәм, был миңә изгелек ҡылмай", - тип.*

*икенсеһе - саҙаҡаны хәләл малдан бирһен;*

*өсөнсөһө - ҡәҙерле нәмә булһын;*

*дүртенсеһе - ни ҡәҙәр күп бирһә лә "күп бирәм" тип әйтмәһен, бәлки "әҙ бирәм" тип күңеленә килтерһен;*

*бишенсеһе - саҙаҡаһы менән тамуҡ ғазабынан ҡотолоуҙы теләһен;*

*алтынсыһы - саҙаҡаһы менән Аллаһ Тәғәләнең рәхмәтенә яҡын булыуҙы теләһен;*

*етенсеһе - үҙе һөйгән нәмәне саҙаҡа итеп бирһен;*

*һигеҙенсеһе - саҙаҡаны бирһен шул нәмәнән, үҙе ул нәмәнә мохтаж булып тороп та, кәрәкмәгән, эшкинмәгән нәмәнән булмаһын;*

*туғыҙынсыһы - үҙенә һис тә ҡалдырмай бирмәһен, бәлки үҙенә лә ҡалдырһын;*

*унынсыһы - ихласы Аллаһ Тәғәлә ризалығы өсөн булһын, рийә өсөн булмаһын (рийә - яһалмалылыҡ, кеше күрһен өсөн генә).*

Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд ғәләйһис-сәләм әйтте: "Бер мәжлестә изгелекте һәм күп сауапты тапмаҫһығыҙ, үҙегеҙ һөйгән нәмәнән саҙаҡа биргәнсегә ҡәҙәр", - тине, йәғни изгелек һәм сауап табайыҡ тиһәгеҙ үҙегеҙ һөйгән нәмәнән хәйер бирегеҙ (аҡса һәм башҡалар).

**"Дәғүәт" нәшриәте.**

***Дауамы бар.***